*Нурия* **РАФИҠОВА**

# «Олатайҙар беҙгә мираҫ иткән Ҡандар, йәндәр, иман берлеген»

*Былтыр үткән “Иң матур ауыл” республика бәйгеһендә финалға сыҡҡандар араһында Тәтешле районынан Иҫке Күрҙем дә бар ине. Конкурста ауылдың тышҡы күренешенә генә түгел, ә уның тарихына, халыҡтың әүҙемлегенә, шулай уҡ ғөрөф-ғәҙәттәрҙең һәм мәҙәни йолаларҙың һаҡланыуына баһа бирелде, интернет киңлектәрендә ауылдың сайты йәки төркөмө алып барылыу ҙа иҫәпкә алынды.*

— Халыҡ, аҡһаҡалдар, йәштәр менән кәңәшләшкәндән һуң, был ярышта ҡатнашырға ниәт иттек, — ти ауыл биләмәһе башлығы Рамир Әхмәтов. — Был конкурс үҙидараны үҫтереү, урындағы мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә халыҡтың ҡатнашлығын йәнләндереү, ауыл ерендә йәшәүҙең бәҫен арттырыу маҡсатында үткәрелде. Күрҙем ауылында элек-электән эшсән, тырыш, егәрле халыҡ йәшәй. Ул үҙенең бөтә республикаға



*Бәрәкәтле ер ул — Күрҙем!*

билдәле шәхестәре менән дан тота. Районда бер сара ла Күрҙемдәр ҡатнашлығынан тыш үтмәй. Күп кенә байрамдар ошо ерлектә үтә, сөнки урамдарҙың таҙалығы һәм матурлығы, халыҡтың тәбиғәткә һаҡсыл мөнәсәбәте һәм тыуған ерҙәренә ҡарата һөйөүе ҡунаҡтарҙы ла йәлеп итә.

Төрлө тарафтарҙа йәшәгән, күптән күрешмәгән туғандарҙы, дуҫтарҙы табыштырҙы был сара, ауылдаштарҙы берләштерҙе. Изге төйәк үҙенең балаларын, ҡан-ҡәрҙәштәрен бергә туплаңы, тарихи тамырҙарына иғтибарҙы йүнәлтте.

Борон Тәтешле яҡтарында тик ҡара урман ғына булған, тиҙәр. Ошо яҡтың Соҡор ауылынан сыҡҡан билдәле башҡорт мәғрифәтсеһе, шағир Ғәли Соҡорой (Мөхәмәтғәли Ҡейеков) бер мәл сәйәхәткә сыҡҡанда, ҡарурмандар араһында ялтырап ятҡан яланды күреп: “Күҙ күреме етмәҫ ҡарурмандан сығып, ошондай ҙа ер күрҙем”, — тигән ти. Бына шулай итеп Күрҙем ауылы барлыҡҡа килгән, тип һөйләй урындағы халыҡ. Элегерәк уны Ялан Күрҙем тип тә йөрөткәндәр, хәҙер инде Иҫке Күрҙем тиҙәр, сөнки яңыһы ла бар. Ғәли Соҡоройҙоң: “Беҙ урман башҡорто булабыҙ. Урман әрсеп, бесәнлек вә игенлек яһап, бар ваҡытымды һәм көсөмдө шул шөғөлдәргә сарыф ҡылдым. Мәсет һәм мәҙрәсә араһында хеҙмәт итеп, ирәкте башҡортоноң иң ғәли миннәтле заты булып торамын”, — тип әйткән һүҙҙәре был яҡтың бар халҡына тап килә.

Ауылдың беренсе кешеләре Ғәли Соҡоройҙоң тыуған ауылы Иҫке Соҡорҙан күсеп килгән. Төрлө тарафтарҙа белем алып йөрөгән Соҡорой 1852 йылда ауылда төпләнә һәм ғүмеренең аҙағынаса шунда йәшәй, крәҫтиән эше менән шөғөлләнә, балалар уҡыта, Мәккә һәм Мәҙинә ҡалаларына хаж ҡыла. 17 йәшенән әҙәби ижад менән шөғөлләнгән Ғәли Соҡорой төрки, ғәрәп һәм фарсы телдәрендә яҙылған йөҙгә яҡын әҫәр ижад итә, китаптары нәшер ителә. Шағирҙың күпселек әҫәрҙәре ҡулъяҙма рәүешендә һаҡланып ҡалған. Был ҡулъяҙмалар әлеге ваҡытта Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала, Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәгендә, Ҡазан дәүләт университеты китапханаһында, Рәсәй Фәндәр академияһы Көнсығышты өйрәнеү институтының Санкт-Петербург бүлеге фондында һәм шәхси архивтарҙа һаҡлана.

Ғәли Соҡорой тыуған ауылында ҡатыны Мәрфүғә Ямалетдин (Йәләлетдин) ҡыҙы менән ғаилә ҡороп, өс ҡыҙ, биш ул тәрбиәләп үҫтерә, мәҙрәсә һабаҡтарын бирә. Иң кесе улы Ғарифулла күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе булып китә. Ул егерме йылға яҡын Күрҙемдә йәшәй, мәҙрәсә һалдыра, яңыса уҡыу индерә. Балаларҙы дин дәрестәренән тыш тарих, география, арифметика фәндәре менән таныштырған, хатта урыҫ теле лә уҡытырға тырышып ҡараған. Халыҡ уны яратып “Ҡыҙыл хәҙрәт” тип йөрөткән. “Ҡыҙыл хәҙрәт” иһә, уҡытыу эштәре менән бергә, ауылда йәшелсә, емеш-еләк үҫтереү, йылғаларҙы, шишмәләрҙе таҙа тотоу тураһында ла ҡайғыртҡан. Ауыл янындағы ете күҙле шишмәнең ете сығанағына “Бәхет”, “Мөхәббәт”, “Аҡыл”, “Сәләмәтлек”, “Имен-




*Хәҙрәт шишмәһен таҙартыу — үҙе бер изге йола*

лек", "Матурлыҡ" һәм "Батырлыҡ" тип ете исем биргән халыҡ. "Хәҙрәт шишмәһе" тиҙәр уны Күрҙемдә, сөнки Ғарифулла Ҡейеков йыл һайын май айында халыҡты ошо шишмә янына йыйып, итәғәтлек, инсафлыҡ һәм сәләмәтлек тураһында вәғәз һөйләр булған. Һуңынан шишмә һыуын ҡайнатып сәй эскәндәр, тип яҙып ҡалдырған бер иҫтәлегендә Күрҙемдең тағы бер данлыҡлы улы Әнғәм Атнабай.

Дин әһелдәре, мәғрифәтсе шағирҙар Ғәли Соҡорой, уның улы Ғарифулла Ҡейеков менән хаҡлы ғорурлана һәм уларҙың аманаттарына тоғро ҡалырға тырыша Тәтешле халҡы. Үрге Тәтешле ауылының бер урамы Ғәли Соҡорой исемен йөрөтә.

Район үҙәгендә лә, тыуған ауылы Иҫке Соҡорҙа ла мәғрифәтсе шағирҙың йорт-музейы асыла. Музей фондындағы 230-ҙан ашыу экспонат араһында Ғәли Соҡорой төҙөгән "Ирәкте ырыуы шәжәрәһе" ла бар. Күрҙем ауылында Ғарифулла Ҡейековтың исемен мәңгеләштереү буйынса эштәр башҡарыла. Һәр йыл һайын 14 май көнө изге йола үтәлә: бар ауыл халҡы сығып, ете урындан бәреп сығып, сылтырап ағып ятҡан "Хәҙрәт шишмәһе"н тәрбиәләй, таҙарта. Шишмәне генә түгел, изге сығанаҡ янында күңелдәрен дә таҙалай күрҙемдәр. Унда төрлө йыйындар ойошторола, дини һәм донъяуи йолалар үтәлә, данлыҡлы мәғрифәтсе яҡташтары хаҡында бәйән ителә, улар рухына бағышлап доға ҡылына.

Дингә әйләнеп ҡайтыу башланғас, ауылда элекке мәсеттең нигеҙенә мулла Хатип Әхмәтҡәләмовтың бүләһе — Азамат атлы егет мәсет төҙөтә башлай. Һуңынан Мәғдән Атнабаев был эште үҙ ҡулына ала. 2003 йылда төҙөп бөтөп, мәсетте асалар. Хәҙер инде ун йылдан ашыу "Хатип" мәсетенең изге урынында изге ниәттәр менән башлап ебәргән эшен — муллалыҡ бурысын Мәғдән олатай атҡара. Бөтә ауыл халҡына дини йолаларҙы үтәүҙе, халыҡҡа хеҙмәт итеүҙе лә, мәсетте лә, зыяратты ла, хатта "Хәҙрәт шишмәһе"н ҡарауҙы ла үҙ өҫтөнә алған хөрмәтле уҙаман.

Ғөмүмән, был яҡтарҙың ерендә лә, һыуында ла, һауаһында ла Атнабайҙар рухы йәшәй. Күрҙем ауылы — Башҡортостандың



*Халыҡ шағиры оло һәм кесе Ватанын берҙәй һөйҙө*

халыҡ шағиры Әнғәм Атнабаевтың тыуған төйәге. Атайҙары Ҡасим һуғышҡа тиклем Карл Маркс исемендәге, уның бер туған ағаһы Ҡәҙим “Урал” колхозында рәйес булып эшләгән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, икеһе лә яу яланында ятып ҡалған. Әсәйҙәре Мәрзиә ире һуғышҡа киткәндә ете бала менән һигеҙенсеһенә ауырлы булып ҡалған. Ғаиләлә тәүге бала — 14 кенә йәшлек Әнғәм ағайҙарын атай тип үҫкән ҡусты-һеңлеләре. Әсәйҙәре Ленинградтан эвакуацияланып килгән дүрт кешене өйгә йәшәргә индергән. Чувановтар ғаиләһе менән ике йыл бергә татыу йәшәгән Атнабаевтар. Хәйер, һәр йортта һуғыштан, аслыҡтан йонсоған блокадниктар Күрҙем ауылы халҡының киң күңелендә урын табып, уларға һыйынып, һуғыш бөткәнсе торған.

Күрҙем мәктәбе Әнғәм Атнабаев исемен йөрөтә, ҡаршыһында арҙаҡлы шәхескә бронзанан бюст та ҡуйылған. Бында шулай уҡ халыҡ шағирының тормошона һәм ижадына арналған музей эшләй. Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Зинира Атнабаеваның мәҙәниәт йортонда урынлашҡан музейҙың йәштәр күңеленә әҙәбиәткә, шиғриәткә, йәнтөйәккә һөйөү, ғорурлыҡ тойғолары һалыуҙа әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ икәнен һөйләп тороу ҙа кәрәкмәйҙер.

2007 йылдан башлап, йыл һайын февраль айында Тәтешле районы хакимиәте башлығы ҡарары буйынса, Иҫке Күрҙем ауылында халыҡ шағирының тыуған көнөнә тура килтереп, “Күрҙем шишмәләре” шиғриәт фестиваль-конкурсы үтә. Яңы ижад итә башлаған һәләтле шағирҙарҙы асыҡлау, әҙәбиәткә иғтибар, ихтирам тәрбиәләү сараның төп маҡсаты булып тора. Районда шулай уҡ Әнғәм Атнабаев шиғырҙарын яттан һөйләүгә конкурс үткәрелә. Әнғәм Атнабаев премияһы ла булдырылған. Күрҙемдәге бер урамға уның исемен ҡушҡандар. Район үҙәгендәге Тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейында ла Атнабаевтар нәҫеле шәжәрәһе урын алған.

Бындай сараларҙың, шәхестәргә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеү менән бер рәттән, тәрбиә сараһы икәнен, төбәктең дә, милләттең дә данын оло шәхестәр күтәргәнен аңлай тәтешлеләр. Бөйөк яҡташтарына иғтибар көсәйгән һайын, ауыл халҡында ла уларҙың тормошона, атайсалдары тарихына ҡыҙыҡһыныуы һәм хөрмәте артыуын да белә.

— Беҙҙең яҡтан бер егет Өфөгә институтҡа уҡырға барған. “Һин ҡайҙан?” — тип һорағандар унан. “Тәтешленән”, тип яуаплаған



*Халыҡ шағиры музейында*

егет. “Улай булғас, йә яҙыусы, йә артист сығыр һинән”, тип шаяртып алғандар. Ысынлап та, беҙҙең яҡ таланттарға бай, — тип кинәнеп һөйләй имам Мәғдән Ҡасим улы.

Бында иҫ киткес гүзәл тәбиғәт: шыршылы урмандар ҙа, легендаларға бай тауҙар ҙа, күлдәр ҙә етерлек. Халҡының ихласлығы, итәғәтлелеге, тырышлығы тураһында әйтеп тораһы ла түгел.

Һәр ауыл тарихы ил тарихынан айырылғыһыҙ. Ил ни күрһә, шуны күргән ауыл ирҙәре: 1904 йылғы рус-япон, Беренсе донъя һуғышында ҡатнашҡан. Ауылды 1917 йылғы ихтилалдар ҙа урап үтмәгән. Мәсет манараһынан үлемесле ут сәсеп ултырған пулеметты ла күргән халыҡ, ауыл уҙамандары Граждандар һуғышының уртаһында булған. 1918 йылдың октябрь айында изге йөрәкле имам Ғарифулла Ҡейеков ҡыҙылдар ҡулынан һәләк була, уның үлеме лә Бабичтыҡы һымаҡ айырыуса аянныслы.

1920-се йылдарҙа ауыл советы, партия ойошмаһы барлыҡҡа килә. 1929 йылда 28 артель бергә ҡушылып, “Маркс”колхозы төҙөлә. Төрлө йылдарҙа колхоз менән Ҡасим Атнабаев, Шәрип Зарипов, Талип Фәрхетдинов, Ғәлиәкбәр Әхтәров, Фәссах Шәриповтар етәкселек итә. Ауылда ете йыллыҡ мәктәп асыла, МТС төҙөлә, райпотребкооперация эш башлай. Күрҙемдә 4 магазин, икмәк бешереү цехы, ашхана асыла. Оҙаҡ йылдар сельпо етәксеһе булып Хәмис Нисапов эшләй. Эш кешеләре өсөн ашхана булдырыла, дөйөм ятаҡтар төҙөлә, китапхана асыла. Тыныс тормош Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән ҡырҡа өҙөлә. Ауылдан 175 ир-ат һуғышҡа китә, уларҙың 74-е генә әйләнеп ҡайта. Фронтовиктар Ҡәҙим Кәримов, Хамат Кәримов, Хәниф Хатипов, Әхтәм Әхтәров, Ғәлиәскәр Әхтәров, Ғаян Әгиев, Миҙхәт Заһитов, Мулланур Хановтар Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, ә Солтанйәр Вәлиев II һәм III дәрәжә Дан ордендары менән ҡайтып төшә ауылға.

Һуғыштан һуң ауыл советы ла үҙгәреш кисерә: хәҙер инде Күрҙем ауыл советына әйләнә. Мәктәп ун йыллыҡ булып китә. 1947 йылда

Шишмә районы ҡыҙы Ғәлиә Байбурина йүнәлтмә менән табип булып эшкә килә. Ҡырк йыл дауамында ул Күрҙем ауылы халҡының һаулығы һағында тора, БАССР-ҙың Юғары Советы депутаты булып һайлана, фиҙакәр хеҙмәте өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана.

Ауылда шулай уҡ дауахана (стационар), бала табыу йорто, дарыухана, лаборатория, элемтә бүлеге гөрләп эшләй. Элемтә бүлегендә күп йылдар эшләгән Ҡәҙриә Моратова “За трудовую доблесть” миҙалына лайыҡ була.



*Рамир Әхмәтов*

1953—1954 йылдарҙа Иҫке Күрҙем ауылы ерҙәрендә нефть ятҡылыҡтары табыла. Күп тә үтмәй, 4-се һанлы нефть-газ сығарыу идараһы эш башлай. Сәнәғәт предприятиеһына оҙаҡ йылдар нефть сәнәғәте отличнигы, атҡаҙанған нефтсе Фәнис Сиразетдинов етәкселек итә. Ауылдың күп кенә ирҙәре нефтсе булып китә һәм юғары дәрәжәләргә күтәрелә, орден-миҙалдар менән наградлана.

Нефть сәнәғәте үҫеше ауылға ҙур үҙгәрештәр алып килә: телефон бәйләнеше, радиоэлемтә эшләй башлай, ауылға электр уты, һәр йортҡа радио үткәрелә. Ҡарттар йорто асыла. Ауылдың Мәҙәниәт йорто сәхнәһендә Зинира Атнабаева, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Байрас Ибраһимов, Фәтхулла Ханов тәүге уңыштарын татый. Нефтселәр ярҙамы менән балалар баҡсаһы төҙөлә, урам бағаналарына фонарь эленә. Мәктәптең спортзалы, хоккей корты, футбол һәм волейбол майҙансыҡтары барлыҡҡа килә.

Ауыл биләмәһе башлығы Рамир Әхмәтов, К. Маркс исемендәге СПК рәйесе Өлфәт Ғәбсәләмов, ауыл старосталары Илдар Мостафин, Фәнис Хәзиев һәм ауыл мәсете имам-хатибы Мәғдән Атнабаев, нефть һәм газ табыу цехы начальнигы Ришат Фазалов — бөтәһе бер булып, киләсәккә ҙур пландар ҡороп, янып эшләй. Ауылда туйҙар гөрләй, балалар тыуа, яңы йорттар ҡалҡып сыға. Шуныһы иҫ китерлек: ауыл кешеләре араһында Рәсәйҙең, Башҡортостан Республикаһының юғары наградалары менән бүләкләнгән шәхестәр күп. Улар араһында нефтселәр, һауынсылар, уҡытыусылар, малсылар, врачтар, мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре, урман хужалығы эшселәре һәм башҡалар бар.

— Ауылыбыҙ кешеләре — беҙҙең иң ҙур таянысыбыҙ , — ти бына инде егерме йыл Күрҙем ауыл биләмәһе менән етәкселек иткән Рамир Әхмәтов. — Улар беҙҙең данлы тарихыбыҙҙы булдырыусылар, һуғыш һәм ҡыр яланы батырҙары, үҙ тыуған төйәгенә тоғро хеҙмәт итеүселәр, ауылыбыҙҙы, уның гүзәл тәбиғәтен һаҡлаусы күркәм шәхестәр. Йәштәребеҙ белемле, өмөтлө, халҡыбыҙ егәрле булғанда, киләсәгебеҙ ҙә матур булыр, тип уйлайбыҙ. Бәрәкәтле ер ул Күрҙем. Эшһөйәр, уңған, ихлас халыҡлы Күрҙем ауылының киләсәге ниндәй булыуы тик үҙебеҙҙән тора!